*Гөлфирә ГӘРӘЕВА,*
*филология фәндәре кандидаты*

# Һуңламаһын әҙип әйткән һүҙ

Һикһәненсе йылдар аҙағынан — туҡһанынсы йылдар башынан алып әҙәбиәттә йәмғиәт тормошоноң бөтә өлкәләренә лә үтеп инеү, уны ҡырыҫ реалистик йүнәлештә яҡтыртыу урын ала башланы. Һүрәтләү өсөн теләһә ҡайһы объектты алыуҙа, тормош материалын һайлауҙа ҡуйылған кәртәләр, сикләүҙәр, тыйыу-киҫәтеү юҡҡа сыға барған һайын, ысынбарлыҡтың быға тиклем күҙ уңынан ситтәрәк ҡала килгән яҡтарына ла иғтибар йүнәлтеүҙә үҫеш күҙәтелде. Бөгөнгө тормоштағы негатив күренештәрҙең ҡатмарлы сәбәптәрен, тамырҙарын эҙләү, шуға бәйле хәҙерге ваҡиғаларҙы үткәндәгеләр менән бәйләү әҫәрҙәрҙең ваҡыт һыйҙырымын да киңәйтә төштө. Замандаштың рухи йөҙө, тормош барышы, кешеләрҙең ижтимағи вазифаһы һәм әхлаҡи яуаплылығы тураһында тәрән борсолоу менән яҙылған, уҡыусыларҙы ныҡлап уйланырға мәжбүр иткән әҫәрҙәр һуңғы осорҙа байтаҡ донъя күрә тора. Уларға публицистик үткерлек, художестволы образдар ярҙамында көн проблемаларын бөтә ҡырҡыулылығында күрһәтеү, шуларҙы тормошсан конфликттарҙа, үткер коллизияларҙа хәл итергә ынтылыу хас.

Хәҙерге осорҙа ижад ителгән әҫәрҙәрҙә, башлыса, кешеләрҙең рухи йәшәйешенә ҡағылған проблемалар алына, ә производство, хужалыҡ итеү мәсьәләләре артта, икенсе пландараҡ тора. Әҙәбиәттең төп вазифаһы — кеше һәм уның яҙмышын сағылдырыу, кешенең кешелеге тураһында ҡайғыртыу. Һуңғы ун—ун биш йылдар эсендә яҙылған әҫәрҙәр был талапҡа, үткән осорҙар менән сағыштырғанда, тулыраҡ яуап бирә башланы, конфликттар тормошсаныраҡ төҫ алды. Бөгөн илдең иҡтисадында, сәйәсәтендә, рухи тормошонда үҙгәртеп ҡороу менән бәйле ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы, драматизм тулы хәлваҡиғалар урын алғанда, заман хаҡында ҡыйыу һүҙ әйтеү хәжәте ҙур. Был ысынбарлыҡты сағылдырыу принциптарының үҙгәреүен дә, герой концепцияһына яҡын килеүҙә яңы алымдар эҙләүҙе лә талап итә. Шуларға бәйле ижад методы мәсьәләһендә лә күп кенә үҙгәрештәр барлыҡҡа килде.

XX быуаттың һикһәненсе йылдары уртаһынан социалистик реализм методынан, ысынбарлыҡты сағылдырыуҙағы уның төп принциптарынан, закон төҫөнә ингән ҡәтғи ҡалыптарҙан баш тартыу күҙәтелә килә. Реализмдың төп принциптары — тарихилыҡ һәм халыҡсанлыҡ яңы йөкмәтке менән тулыландырыла. Тарихи-революцион роман һымаҡ, традицион жанрҙар яңы — тарихи, документаль, фәлсәфәүи романдар менән алмашына, тормош күренештәре, йәшәйеш шартлы, хатта ғәҙәти булмаған саралар аша сағылдыры-

ла. Һуңғы ике тиҫтә йыл самаһында донъя күргән әҫәрҙәр ирреалистик, фантастик, фантасмагорик, символик, мистик, мифик жанр һыҙаттарын үҙ эсенә алһалар ҙа, соцреализм әҙәбиәтендәге “миф”тарға ҡарағанда, күпкә ышандырғысыраҡ, тәьҫирлерәк реалистик картиналар тыуҙырыуҙары менән характерлана. Т.Ғиниәтуллин, Р.Солтангәрәев, Ә.Әминев, Ш.Хәжиәхмәтов, Ә.Үтәбай, Ф.Аҡбулатова, Г.Ғиззәтуллина, Ф.Исхаҡова һәм башҡаларҙың әҫәрҙәре быға миҫал була ала.

Был мәҡәләлә Әмир Әминев ижадындағы ҡайһы бер үҙенсәлектәргә, ысынбарлыҡты сағылдырыуҙа әҙип ҡулланған принциптарға туҡталып үтеү маҡсат итеп ҡуйылды.

Әмир Әминев — реалистик стилдәге ижадты үҙ иткән әҙип. Әммә уның һуңғы йылдарҙа яҙылған “Ҡар кешеһе” хикәйәһе, “Ҡытайгород”, “Танкист”, “Усман ташы” повестарында яңы юҫыҡта эҙләнеүҙәр, жанрҙар синтезы күҙәтелә.

“Ҡар кешеһе” хикәйәһендә автор тотош кешелек цивилизацияһына янаған экологик проблема хаҡында саң ҡаға. Кешеләрҙе ғәмһеҙ йоҡоһонан уятыр, һиҫкәндерер өсөн ябай, ҡәҙимге әҙәби алымдар ғына көсһөҙ булыуын, тәьҫир итмәүен яҡшы белгән әҙип фантасмагорияға мөрәжәғәт итә. Шаҡ ҡатырыу юлы менән — ауылға зыян килтереүсене, тәүҙә айыуға һунарға сыҡҡан Йомағолдоң мажараларын, реалистик алымдарҙа һүрәтләп килеп, артабан был ғифриттең ҡар кешеһе булыуын, уларҙың үрсеүен, тәүҙә малға, унан кешеләргә һөжүм итеүен хикәйәләй барыу юлы менән автор кешеләрҙе әйләнәтирә мөхиткә, тәбиғәткә мәрхәмәтле мөнәсәбәттә булмауҙың ниндәй ҡурҡыныс эҙемтәләргә килтереүе мөмкинлеген, тотош кешелек донъяһына янаған афәт икәнлеген ҡыҙыҡлы алымдарҙа иҫкәртә.

“Ҡытайгород” повесы — реализмды, фантастиканы, трагикомедияға хас һыҙаттарҙы, парадоксты үҙендә туплаған әҫәр. Повесть баштан-аяҡ кинәйәгә ҡоролған. Халыҡтың ер йөҙөндә халыҡ булып йәшәүенә ҡағылышлы проблеманы күтәреүе, киләсәкте, алдағы тормошто күҙаллауы һәм ғибрәтле итеп күрһәтеүе менән уҡыусыны тетрәндерерлек, ҡаршылыҡлы, ҡатмарлы эмоциональ кисерештәрҙе күңел түре аша үткәреп ҡабул итерлек, катарсис кисертерлек көрәнеш булды был әҫәр.

Повесть, тәү ҡарашҡа, тотош фантастикаға ҡоролған һымаҡ, сөнки беҙҙең ерҙәр ҡытай кешеһенә лә, башҡаһына ла әлегә һатылмаған. Шул уҡ ваҡытта был әҫәр — бөтә тейешле ҡанундары һаҡланған реалистик әҫәр. Бер яҡтан, Дәүләт думаһында ер һатыу буйынса закондар ҡабул ителгән, һәм повеста һүрәтләнгән ваҡиғаларға оҡшаш хәлдәр бөгөн булмаһа ла, иртәгә, яҡын киләсәктә булыуы бик ихтимал. Икенсе яҡтан, ауыл халҡының тормош-көнкүреше лә, холоҡ-фиғеле лә, психологияһы ла, үҙ-ара мөнәсәбәттәре лә, ер һатыуға бәйле үҙ ҡараштарын белдереүҙәре, үҙ-үҙҙәрен тотоштары ла тап тормоштағыса. Район башлығы Хаким да, колхоз етәкселәре лә тап ысынбарлыҡтағыса. Уларҙың прототиптары беҙҙең арала йөрөп ята. Саф реалистик әҫәрҙәрҙәге етәксе геройҙар менән Хакимды бер таҡтаға ҡуйып ҡарарға мөмкин. Әйтәйек, Хаким борон-борондан күҙ ҡараһылай һаҡлаған, ҡәҙерләгән, ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған ерҙе һата, Д.Бүләковтың Нурихановы (“Килмешәк”) дан, орден алыр өсөн Атбатҡанды киптерергә йөрөй, Р.Солтангәрәевтың Баса-

риевы (“Беҙ йәшәгән ер”) карьера өсөн бай ятҡылыҡты ҡоротҡансы нефтен һурып ала һ.б.

Быуаттар буйына тыуған ере өсөн ҡан түккән, мөхтәриәтен һаҡларға ынтылған башҡорт халҡының көрәш тарихын яҡтыртҡан әҫәрҙәр байтаҡ ижад ителгән. Әммә уларға үткәндә, тарихта ҡалған ваҡиғалар тип кенә ҡарала. Бөгөн ер һатыуҙың һәләкәткә килтереү ихтималлығы хаҡында публицистик сығыштар ҙа байтаҡ. Ләкин улар ҙа әҫе мәлендә генә тәьҫирле. Әмир Әминев иһә художестволы һүҙ ярҙамында башҡортто башҡорт булараҡ йәшәткән, һаҡлап килгән ерҙең кеше тормошондағы урынын бөгөнгө көн материалында үткер картиналарҙа, бар тулылығында һүрәтләп бирә алған. Кәмит ситуациялар ироник тонда һүрәтләнһә лә, уның асылында фажиғә ята. Был йәһәттән повесть трагикомедия жанрына яҡын.

Ваҡиғалар районда артта һөйрәлеүсе “Алға” колхозында бара. Ҡытайҙан килгән бизнесменды ҡурай уйнап, ҡабарып бешкән икмәк менән ҡаршылайҙар. Ә алты айҙан һуң ерҙәрен ҡайтарып алырға тип килгән ауыл халҡын ҡытай хужалар ОМОН, милиция, ғәскәр менән ҡаршы ала: “камуфляж форма, баштарына ялтыр каска кейгән, ҡулдарына резина күҫәк тотҡан ҙур төркөм һалдаттар былар яғына ҡарап тора ине”.

Әҫәр тотош кинәйәгә ҡоролған, тигәйнек. Был кинәйә сюжет үҙәгендәге төп ваҡиғаны тасуирлауға ғына ҡағылмай. Ә төрлө деталдәр, исемдәр, атамалар, ваҡ-ваҡ эпизодтар ҙа тәрән символик мәғәнәгә эйә.

Район хужаһының исеме юҡ, ул Хаким тип алынған. Уның бар маҡсаты — карьераға үрләү, юғарынан төшкән күрһәтмәләрҙе тейешенсә һәм ваҡытында үтәү, үҙ районында сикләнмәгән власҡа эйә булыу, хакимлыҡ итеү. Хаким үҙенән ер, тел, милләт тураһында һорамаҫтарын яҡшы белә, шуға ла ул Фәйзулла ҡарттың, сөгөлдөрсө Нәғимәнең, уҡытыусы Рәсүлдең ҡаршылашыуҙарын еңел һындыра. “Со временем ауылдар бөтәсәк, эш шуға бара”, тип алдарға, берәүҙәрҙе ҡурҡытып, икенселәргә араҡы таратып биреп, өсөнсөләрен мыҫҡыл итеп көлөп, дүртенселәрҙе “мәсьәләне дөрөҫ самалай” тип үсендереп, алдына алған маҡсатына ирешә. Милләте менән башҡорт булһа ла, рухы менән маңҡорт Хаким түрәлек баҫҡысынан өҫкә үрләү өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. Уның ҡыланыштарына ҡарап, ҡайһы берәүҙәрҙең “ришүәт төрлө сүрәткә индерә шул” тип әйткән фаразы хаҡтыр тигән фекер уяна.

Сөгөлдөр тейәлгән ЗИЛ машинаһы баҫыуҙа батып ултыра, алға ла, артҡа ла ҡуҙғала алмай. Түрәләр, ҡунаҡтар күҙенә салынмаһын өсөн уны һалам менән ҡаплап ҡуйғандар. Етмеш йыл төҙөгән социализм ҡоролошоноң, коммунизмға табан китеп барыуҙың, Ленин идеяларының мәңге тере булыуының бөгөнгө көндә “батып ултырыуы” ул. Ер һатып отолған халыҡтың да батыуы ул.

Ауылдың исеме — Һыбай. Ғәҙәттә, һәр яңылыҡты, йыш ҡына яҡшылыҡҡа үҙгәреште ҡабул итмәй ҡаршылашыусы арҡыры крәҫтиәндәр был юлы “бындай бәхет бүтән килмәйәсәк… тиреҫ еҫкәп, батҡаҡ кисеп ғүмер үтте бит инде былай ҙа” тиҙәр, етешһеҙ, бер уңайлыҡтары ла булмаған михнәтле тормошта көн итеп туйған халыҡ ҡалала рәхәт тормошта йәшәү хаҡына ерҙе һатырға ҡаршылыҡһыҙ ғына ризалашып та ҡуя. Йәғни, кәрәкмәгән саҡта һыбай атланып

саба. Ашыҡмайынса, төплө фекер алышып, уртаҡ бер фекергә килеү урынына, иҫ киткес мөһим мәсьәлә дыуамаллыҡ, илтифатһыҙлыҡ, яндырайлыҡ арҡаһында бик тиҙ һәм еңел хәл ителә. Фәйзулла ҡарттың: "Беҙ уларҙы (балаларҙы) ерҙән айырабыҙ, телдән яҙҙырабыҙ. Телдән яҙҙырҙыңмы — милләт бөттө тигән һүҙ", тигәненә берәү ҙә иғтибар итмәй, күңел һалып тыңламай.

Юл ситендә үҫкән үләндәрҙе сабып, ҡоймаларҙы буяп, яңыртып, ҡыҙыл туҡымаға аҡ буяу менән "Хуш килдегеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар!" тип яҙып, һылыуҡайҙар конкурсынан яҙҙырып алған сибәр ҡыҙға икмәк-тоҙ тоттороп, уның эргәһенә бейеү ансамбленән аҡса түләп, махсус рәүештә алып килеңгән һомғол егеттәрҙе ҡуйып ҡаршы алына ҡытай бизнесмены. Йәғни, халыҡ буласаҡ һәләкәткә байрамға әҙерләнгән һымаҡ әҙерләнә. Һуңынан шул уҡ ҡытай халыҡты баштан-аяҡ ҡоралллы ғәскәр менән ҡаршылай. Бына ҡайҙа ул парадокс!

"Алға" исемен йөрөткән колхоз районда иң артта һөйрәлә. Ер һатыуға тигәндә һыбай саптырып сыҡҡан Һыбай ауылы халҡы эйәрҙән төшкәндә, аҡыл кергәндә һуң булып сыға. Ҡунаҡ алдында йөҙ ҡыҙармаһын өсөн тип тырышыу арҡаһында балалары алдында, үҙ-үҙҙәре алдында йөҙҙәре ҡыҙара. Ҡунаҡ күңелен күп күрә торғас, үҙ күңелдәре төпһөҙ, буш ятыуға ҡала. Матди байлыҡ тыуҙырыу мөһим, "күперҙәр һалдырыу, асфальт түшәү, газ үткәреү, йорттар күтәреү һинең тел, милләт тигән нәмәләреңдән куда важнее" ти торғас, үҙенең кем икәнлеген, ҡайһы ил, милләт улы, ҡайһы Ватан гражданы булыуын белмәгән рухһыҙ әҙәмдәр генә ҡала. Ғөмүмән, әҫәрҙә бындай парадокстар тулып ята.

***

Заман проблемаларын, ижтимағи-социаль, рухи-әхлаҡи өлкәнән булған киҫкен күренештәрҙе ҡыйыу сағылдырған, бөгөнгө йәмғиәттең йөҙөн күрһәткән "Танкист" повесында герой характеры динамикалы хәрәкәттә асыла бара, композиция ҡоролошонда урын алған бөтә саралар ҙа — объектив хикәйәләү, эске монологтар, эске диалогтар, деталдәр, портрет характеристикалары, йыйнаҡ, иң кәрәкле мәлдәрҙе генә яҡтыртҡан ретроспектив һүрәтләү — әҫәрҙә күтәрелгән проблемаларҙы бергә төйнәрлек, бер-береһенә тығыҙ үрелгән сюжет ептәре менән бәйләй.

Ҡалаға ҡыш сығырға тип ваҡытлыса ҡыҙына йәшәргә килгән Тимерғәле ҡарт менән Гөлсөм араһында ауылдағы өйҙө һатыу-һатмау хаҡында ҡыҙыу бәхәс бара. Тиҙерәк машина һатып алаһы килгән Илшат кейәүе был бәхәскә "кәрәсин" өҫтәп, тағы ла ҡуҙғытып тора. Ваҡиғалар төйөнләнеше бына шулай киҫкен башлана.

Тимерғәле ҡарт өсөн өйө — тыл, плацдарм, ул үлгәнсе үҙ өйөндә үҙе хужа булып, кәмһенмәй-хурланмай, ҡағылмай-һуғылмай йәшәгеһе килә. Һуғышта батыр танкист булған яугир һәр саҡ командирының һүҙҙәрен иҫкә алып, яңғыҙ тормошонда уның аҡыллы кәңәшенә таянып йәшәй.

"Тылһыҙ ҡалһам, эш харап, ҡамап аласаҡһығыҙ ҙа, тапап китәсәкһегеҙ. Холҡондо беләм. Шуға ла плацдармды бирмәй торам әле", — тигән ҡартҡа, ваҡытлыса ғына ҡыҙымда йәшәп торам да ҡайтам өйөмә тигән геройға, юл киҫелгән булып сыға.

Тимерғәле ҡарт дауаханала ятҡан арала, Гөлсөм атай йортон һатып та ебәрә. Тимерғәле өсөн тыуған йортонан яҙыу бер оло ҡайғы булып, ҡарт танкист "сигенеү өсөн плацдармын юғалтһа", икенсе һәләкәт — ҡыҙының өйҙө рөхсәтһеҙ һатып ебәреп, шуны атаһына әйтмәүендә. Был хаҡта ауылдашы Мөхәрләмдән ишетеп, Тимерғәленең йөрәге сыҙамай, "контузияһы яңырып, ҡолаҡтары томаланды, күҙ алдында, гүйә, ут-ялҡын, шартлау пәйҙә булды, танкылары дошман менән бәрелеште". Артабан дауаханаға барып эләккән Тимерғәле ҡарт үҙ яҙмышындағы киҫкен бороloштар хаҡында уйлана. Үҙенең ғүмере буйы намыҫлы эштә үткән йылдарын, оҙаҡ йылдар татыу ғаилә ҡороп йәшәгән йәмәғәтенең күңелсәк, йомшаҡ күңелле, ауыр һүҙ әйтеүсегә ҡайтарып яуап та бирмәй, "күҙҙәрен шар асып" тороусы ҡатын булыуын, балалары араһында бер Гөлсөмдөң генә ҡаты бәғерле булып үҫеүен күҙ алдынан үткәрә. Гөлсөм менән кейәүенең ҡылыҡтарын ул үҙе йәшәгән, үҙе дөрөҫ тип таныған, үҙе тайпылышһыҙ үтәгән әхлаҡи критерийҙар юғарылығынан, һуғыш осоронда ут-ялҡын эсендә һыналған юғары кешелеклелек ҡиммәттәренән сығып баһалай.

Йортто һатыу — матди байлыҡ булараҡ уны борсомай, йортон юғалтыу менән ул килешергә лә мәжбүр. Әммә ул балаларының әхлаҡһыҙ ҡылығын аңлай алмай, әҙләнә, күңеле аша үткәрә, көсөргәнешле рухи-психологик процеста уның йәшәү принциптары башҡаларҙың, йәшерәк быуындың, йәшәү алымдары, уларҙың "дөрөҫләктәре", үҙҙәрен хаҡлы тип һанауҙары менән бәрелешә. "Күңел өсөн генә булһа ла, атай, һаттыҡ инде, үпкәләмә, тип тә әйтмәйҙәр, ә, исмаһам. Ул бит әле иҫән, үҙ аяҡтары менән йөрөп ята", — тип үҙ-үҙенә әйткән һүҙҙәрендә геройҙың көсөргәнешле күңел драмаһы сағыла.

Мәрхүмә әбейе һымаҡ уҡ, күңелсәк, яғымлы, йомшаҡ күңелле ейәне Руслан олатаһынан парктағы танкыны барып ҡарайыҡ, тип үтенә. Тап ошо ейәне менән Тимерғәле араһында — өлкән быуын менән кесе быуын араһында — йылы мөнәсәбәттәр урынлаша. "555" һанлы танкыһын тапҡандан һуң, йәшәүенең мәғәнәһен юғалтҡан, күңелен битарафлыҡ солғап алған, төшөнкөлөккә бирелгән геройҙың кәйефе күтәрелә. Ейәненә нәҡ ошо танкыла һуғышыуын һөйләй. Әммә Русландың олатаһы һөйләгәндән алған һоҡланыулы тәьҫораттарын, олатаһы менән ғорурланыуын кейәүенең мыҫҡыллауы селпәрәмә килтерә.

"Тылымды ҡәбәхәттәрсә баҫып алдылар, сигенергә урын ҡалманы, плацдарм ҡулдан ысҡынды", тип йөрөгән танкист парктағы танкының тарихын белешер өсөн төрлө ерҙәргә, төрлө инстанцияларға мөрәжәғәт итә. Тик бөтә ерҙә лә ул битарафлыҡҡа тап була, үҙҙәрен аҡыллы иҫәпләгән төрлө вазифалы был бәндәләр элекке яугирҙы иҫәргә һанай. Ҡыҙының өйөндәге мәрхәмәтһеҙ мөнәсәбәт бында ла ҡабатлана. Повеста ғаиләләге яҡындар араһындағы ғәрип мөнәсәбәттәр йәмғиәт менән шәхес араһындағы ғәрип мөнәсәбәттәргә барып тоташып, дөйөмләштерелә. Үҙ граждандарына, айырыуса Ватан азатлығы өсөн ҡан ҡойған оло быуынға ихтирамлы, иғтибарлы мөнәсәбәт булдыра алмаған йәмғиәт ғаиләләге, яҡын туғандар араһындағы мөнәсәбәттәргә лә йоғонто яһай. Өйҙә ата-әсәһенең Тимерғәлене ҡыйырһытыуҙарын күреп йөрөгән өлкән ейәне Азаттың уға ҡул күтәреүе герой күңелендә йыйылып килгән үпкә-рәнйеүҙәрҙең

һуңғы нөктәһе була. Драматик ваҡиғалар үҫеше, башлыса, Тимерғәленең күңелендә барған көсөргәнешле уй-тойғолар сылбыры, психологик процесс кульминация нөктәһенә етә. Геройҙы ейәненең һуғыуы бер тетрәтһә, ҡыҙы менән кейәүенең улдарын яҡлап, аталарын иң әсе һүҙҙәр менән ғәйепләүҙәре айырыуса ныҡ рәнйетә. Бөтә сабырлығын йыйып, түҙеп килгән Тимерғәле өйҙән сығып китә, берәҙәк урам тормошонда йәшәргә мәжбүр була.

Йәмғиәттең иң түбән социаль ҡатламы тереклек иткән тормоштоң үҙ ҡанундары. Был ҡанундар — яуыз, рәхимһеҙ, ҡаты ҡанундар, ҡырағай хайуандар рефлексы хөкөм һөрә унда. Хәйер, үҙ территорияларына бер кемде лә индермәгән, үҙҙәре тулы хакимлыҡ ҡылған, ситтәрҙе туҡмаған, имгәткән, үлтергән, бар “мөлкәтен” тартып алған берәҙәктәрҙең йәшәү рәүеше юғары социаль ҡатламдың — ил байлығын, дөйөм халыҡ мөлкәтен үҙ ҡулдарына эләктереп алған олигархтарҙың, эре бизнесмендарҙың, “закондағы бурҙарҙың” эш итеү алымдары ул.

Фашистарҙың ҡотон алған батыр яугирҙан, ғорур танкистан, йортҡураһы булған крәҫтиәндән асарбаҡҡа әйләнгән Тимерғәлегә үҙ йәшәү принциптарын урам законлары, бүтән дөрөҫлөктәр, башҡа тормош фәлсәфәһе менән сағыштырып, һынап ҡарарға, үҙ ҡараштарын йәмғиәт ҡанундары менән бәрелештә анализларға, тормошҡа булған үҙ баһаһын заман ысынбарлығы менән үлсәргә тура килә. Тимерғәленең өйҙән урамға күсеүенә бәйле һүрәтләү объекты ла киңәйә, панорамлыҡ көсәйә, йәмғиәттең социаль йөҙөн асыуҙа сюжет һыҙыҡтары ла, төрлө йүнәлештәге мәсьәләләрҙе күтәреп, байый төшә, конфликт та киңерәк, тәрәнерәк төҫ ала, характер ҙа тулыраҡ асыла. Ғаилә мөнәсәбәттәрендәге ҡаршылыҡтар йәмғиәт менән шәхес араһындағы трагик мөнәсәбәттәргәсә үҫтерелә, киҫкенләштерелә. Милиция участкаһындағы татар милиционерҙарының Тимерғәленең башҡортса яҙылған ғаризаһынан көлөүҙәрендә, ҡарбузын төшөрөп ватҡан мәрйә ҡатынының “татарва” тип һүгеүендә (урыҫтар өсөн башҡорто ла, татары ла бер үк — мәсхәрәле, нәфрәтле мөнәсәбәт яңғырап торған “татарва” һүҙендә сағыла) милләт-ара, тел мәсьәләләре ҡырҡыу сағылыш ала.

Яҙыусы повестың композиция ҡоролошонда йыш ҡына теге йә был проблеманы йәиһә күңел торошон баҫҡыс-баҫҡыс күрһәтә, ҡабатлау алымына мөрәжәғәт итә. Тимерғәле ике тапҡыр дауаханала ятып сыға, шул арала ул үткән ғүмерен дә, бөгөнгө тормошон да күҙ алдынан үткәреп, уй-фекерҙәр төйнәй. Ҡыҙының өйөндә саҡта ҡыйырһытыуҙарҙы герой ҡат-ҡат кисерә — өйөн һаталар, кейәүе мәсхәрәләй, аҡса урлауҙа ғәйепләйҙәр, ейәне олатаһына һуға. Был ҡабатлауҙар конфликтты киҫкенләштереүгә, Тимерғәленең өйҙән сығып китеүен психологик йәһәттән мотивлаштырыуға, быны һуңғы сиктә яһалған аҙым икәнлегенә ышандырыуға хеҙмәт итә. Танкист дуҫтары Тюрин, Филиппов, Ивановтың ҡабат-ҡабат хәтергә төшөүҙәре Тимерғәлегә килеп тыуған ситуацияны баһаларға булыша, уға өйҙә лә, урамда ла йәшәү өсөн терәк, рух ныҡлығы булып тора. Һуғышта ут-ялҡынлы көрәштә, үлем менән алышҡанда таяныс булған яуҙаштары геройға берәҙәк тормоштоң ҡаты ҡанундарына ла баш эймәҫкә, һынмаҫҡа ярҙам итә.

Тимерғәле ҡарт өйөнән бер нисә ҡат сығып китә. Тәү тапҡыр вокзалда төн үткәреп ҡайта. Ҡыҙының үҙгәреүенә, күңелендә миһыр-

банлыҡ уяныуына өмөт итә. Икенсе тапҡыр милиция участкаһына саҡыртып алынған ҡыҙы оҙатыуында подъезд тупһаһына килеп еткәс, боролоп китә. Унда ла ҡыҙының үҙен туҡтатырына, йылы һүҙ әйтеренә өмөт итә.

Тимерғәленең танкист булыуы, “555” һанлы танкыла һуғышыуы һәр даим иҫкә алына, күтәрелгән проблемалар төрлөсә ошо танкыға — хәҙер инде Тимерғәленең плацдармына, йәшәү мәғәнәһенә, тормошта уны тотоп торған берҙән-бер мөҡәддәс, яҡын әйбергә килеп бәйләнә, фәлсәфәүи фекер ебенә урала бара. Танкыһына ла ул ике тапҡыр күтәрелә. Беренсе тапҡыр ҡыуып төшөрөлгәс тә, бирешмәй, кире сигенмәй, һәр детален уйлап, мәңгелеккә китәсәк юлы шул танкынан башланасағын тойоп әҙерләнә ул ҡабат танкыға күтәрелергә. Постаменттағы танк — Тимерғәлеләр быуыны инанған изгелек, намыҫ, выждан, Ватан бойондороҡһоҙлоғо өсөн ғүмереңде ҡорбан итергә әҙерлек, беләгеңдә көс булғансы илеңә намыҫлы хеҙмәт итергә кәрәклек, дуҫлыҡ, тоғролоҡ, иманыңа хыянат итмәү, яҡындарыңды яратыу, кешеләргә хөрмәт, иғтибар һымаҡ рухи-әхлаҡи ҡанундарҙың символы ла һәм, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың бөгөнгө көндә, изгелекте яуызлыҡ еңгән бөгөнгө заманда ҡатып ҡалыуы ла. Тотош йәмғиәттә был изге төшөнсәләрҙең ҡатып ҡалыуы ла.

Сиселештә автор компромисһыҙ, аяуһыҙ реалистик һүрәтләү алымынан ситләшеп, ярым реалистик, ярым фантастик һүрәтләү алымына күсә. Тимерғәленең төшөндә танк хәрәкәткә килә, герой үҙен рәнйеткән кешеләр менән иҫәп-хисабын өҙә, тормошона йомғаҡ яһай, изге күңелле кешеләр менән хушлаша. Хыялында-төшөндә булһа ла ул яуызлыҡҡа хөкөм сығара, ғәҙеллекте аяҡҡа баҫтыра, үҙ хоҡуҡтарын яҡлай, үҙенең тылын, плацдармын кире ҡайтарып ала. Бахыр берәҙәк булып түгел, ә һынмаҫ рухлы, батыр, ғорур, еңелмәҫ булып ҡаршы ала ул ғүмеренең һуңғы сәғәтен. Нәҡ бына шул эстетик маҡсатын үтемле итеп тормошҡа ашырыу өсөн автор реалистик стилдән ирреализмға күсә...

Повеста киҫкен ижтимағи-социаль, рухи-әхлаҡи проблемалар күтәрелә, уларҙың кеше күңелендә тәрән драматик тойғолар уятыуы, рухи-әхлаҡи эҙләнеүҙәргә этәреүе яҡтыртыла, йәмғиәт менән шәхес араһындағы, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәрендәге ҡырҡыу ҡараштар бәрелеше сағылдырыла, кеше шәхесенә ҡарата булған битарафлыҡ, рәхимһеҙлек аяуһыҙ кире ҡағыла.

***

“Усман ташы” повесы экспозициянан башланып китә. Тәүҙә автор Усман ташы, икенсе исеме менән әйткәндә, Ташйылға тип аталған урынға киңәйтелгән характеристика биреп уҙа. Күңелгә бер аҙ шом да һалыусы был мөғжизәүи урынға элек халыҡтың дауаланырға килеп йөрөүе, таштарҙан шифа табыуы, хатта Мәскәү ғалимдарының Усман ташын тикшереп, пробалар алып йөрөүҙәре хаҡында ла телгә алына.

Артабан әҙип шул ташлыҡҡа йыраҡ түгел урынлашҡан Усман ауылының тормош-көнкүрешен бәйән итеүгә күсә. Эҫәрҙә уның башҡа ауылдарҙан бер нимәһе менән дә айырылмауына баҫым яһала. Дүрт ауылды берләштергән колхоз таралғас, мөлкәтен таратып-талап алып бөткәс, хужалыҡ юҡҡа сыға. Кем нисек булдыра ала, шулай донъя көтә, күптәр эшһеҙлектән эскелеккә бирелә. Ауылда һәр

өйҙә тиерлек бал ҡоялар, көмөшкә ҡыуалар. Әбейҙәр тиҫбе тартыр урынға, итәк аҫтынан араҡы һата. Әҙәп-әхлаҡ тәрбиәләүгә, кешеләрҙең мәҙәни кимәлен күтәрергә, культуралы ял итеүен тәьмин итергә тейешле булған клуб бикле тора, асылһа — кәрт һуғалар, сәкәләшәләр, быға клуб эргәһендә генә асылған һыра лавкаһы ла “булышлыҡ” итә.

Ауылда балалар аҙайғандан-аҙая. Урта мәктәп тәүҙә һигеҙ йыллыҡҡа, унан башланғысҡа әйләнә. Әммә балалар һаны аҙ булыуы бер бәлә булһа, ҙурыраҡ һәм ҡурҡыныcыраҡ бәлә — уларҙың күпселегенең эскелек арҡаһында физик яҡтан зәғиф, аҡыл йәһәтенән “бер төрлөрәк” булып тыуыуында. Физик һәм рухи ғәриплеккә килтергән тағы ла бер ғибрәт — нәҫелдәштәрҙең бер-береһенә өйләнешеүе. Элек ете быуын нәҫел-нәсәбен юллап, тикшереп ҡауыштырһалар, хәҙер йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе бер кем дә белмәй ҙә, белһә лә һанға һуҡмай, ике туған тейешлеләр ҙә өйләнешә һәм донъяға ғәрип балалар тыуа.

Бына ошондай тормош эсендә йәшәп ята һикһәнләп йорттан торған ҡәҙимге Усман ауылы. Тимәк, Усман ауылындағы хәл-әхүәлдәргә оҡшаш тормош башҡа бик күп ауылдарға ла хас тигән һығымта сығарыла.

Артабан яҙыусы ошондай күңелһеҙ, эс бошорғос, хәүефле фонда айырылып торған бер ғаиләне һүрәтләй башлай. Шул рәүешле повестың төп геройы Рамазан Усманов образы хикәйәләүгә килеп инә. Ул утыҙ йылға яҡын көтөү көтә. Ғүмере буйы эсмәй, тартмай, намыҫлы хеҙмәт итә, ете балаға өлгөлө атай була. Мәктәптәге тарих уҡытыусыһының Рамазандың ата-бабаһы булған Усман ҡарт тураһында, уның 1812 йылда яуҙа ҡатнашҡанлығы, ҡаһарманлығы өсөн ике миҙал менән бүләкләнгәнлеге, әлеге ауыл тирәһендәге ерҙәрҙең уға, сотникка, бүләк ителгәнлеге хаҡында гәзиткә баҫтырған мәҡәләһен автор юҡтан ғына телгә алмай. Был, бер яҡтан, Рамазан Усмановтың затлы нәҫелдең бер ярсығы булыуын иҫтә ҡалырлыҡ итеп зиһенгә һеңдерергә булышлыҡ итһә, икенсе яҡтан, уның характерын асыуға, дөрөҫөрәге, алдағы бүлектәрҙә ата-бабаһы һымаҡ уҡ, уның да ил, халыҡ ихтыяжы өсөн тырышып, фиҙакәр хеҙмәт итеүен баҙығыраҡ күрһәтеү өсөн кәрәк.

Тышҡы йөҙ-ҡиәфәте менән Рамазан ҡарт башҡаларҙан әллә ни айырылып та тормай: “Урта буйлы, тарамыш, һаман да сөм-ҡара сәсле, Кавказ кешеһенекенә оҡшап ҡылыс танаулы, ялбыр ҡашлы, йомшаҡ ҡарашлы ҡарт”. Уны ғәҙәти яһамаған үҙенсәлек — уның дүрт улының да, өс ҡыҙының да буй-һынға зифа, төҫ-башҡа һылыу, зирәк аҡыллы, отҡор тәбиғәтле, һәләтле булыуҙарында. Дөйөм физик һәм аҡыл ғәриплеге фонында был ғаилә дегәнәк араһында үҫкән гөл-сәскәгә тиң. Ә был барыһын да көнләштерә, һарыуын ҡайната, асыуын таштыра. Рамазан ҡарттың ете балаһы ла үҙ көстәре менән төрлө вузға инеп уҡып, диплом алып, төрлө урындарҙа яуаплы вазифа башҡаралар, абруйлы белгестәргә әйләнәләр.

Яҙыусының Усман ауылы һәм Рамазан ҡарт ғаиләһе тормошон ентекләп тасуирлауының сере ваҡиғалар төйөнләнешендә бер аҙ асыҡлана төшә. Көтмәгәндә бәхетле, татыу ҙур ғаиләгә оло ҡайғы килә — әсәләре Ғәзизә донъя ҡуя. Рамазан ҡарт әбейенең вафатын бик ауыр кисерә, тормоштоң йәмен юғалтҡан ир ун көн айнымай эсә. Портрет характеристикаһы: “ҡарайған, һурыҡҡан һәм ҡырынмаған

йөҙ, кипкән тән, нуры ҡайтҡан күҙҙәр" геройҙың эске ғазаплы кисерештәрен аңғарта. Был эпизодтар Рамазандың ҡатынын яратып, яҡын күреп йәшәүен, йәмәғәтен юғалтыуҙың уның өсөн биниһая ҙур бәлә икәнлеген асып һалыу өсөн кәрәк. Геройҙың ҡатынына тоғро ир булыуын, баҫалҡы һөйөүенең ни тиклем көслө икәнлеген күрһәтеү өсөн кәрәк. Балалары ярҙамында Рамазан ҡарт, ҡайғыны сабыр күтәреп, артабан йәшәргә үҙендә көс таба.

Ваҡиғалар төйөнләнешендә алтмыш йәшлек Рамазан ҡартҡа күрше йәшәүсе йәш ҡатын Гөльямал сәйер үтенес менән мөрәжәғәт итә. Гөльямалдың үҙ иренән тыуған ике улы ла сирләшкә, сибек, кеҫәһенең арҡаһында бөкөрөһө лә бар. Эскесе, эшләп тә бер файҙа килтермәгән ире Ринаттан күп яфа сикһә лә, ике улының да сирле булыуы йөрәген ашаһа ла, сабыр, уңған, аҡыллы ҡатын бирешмәй. Ул, Рамазан ҡарттарға күрше генә йәшәгәс, бәхетле тормоштоң серен белә: араҡы, тәмәке төтөнө менән ағыуланмаған орлоҡтан яралып, атаәсәнән матур тәрбиә алып, бәләкәйҙән эшкә ҡатнашып үҫкән балалар — бәхет сығанағы әсә өсөн. Гөльямалдың артынан ябылған "ғүмерҙә шығырламаған" солан ишегенең "ҡайғылы сыйылдап оҙатыуы" ҡатын күңелендәге рәнйеүле кисерештәргә ишаралай. Һылыу ҙа, егәрле лә, теттереп донъя көтөрҙәй йәш ҡатындың кәмһенеүле хәлгә төшөүенең әселеген аңлата был шығырлау.

Тиҫтере Сабирйәндең улы Ринаттың айныҡмай эсеүе, аҡсаһын туҙҙырыуы хаҡында зарланыуын ишеткәс, тәүҙә Гөльямалды ҡырҡа кире ҡаҡҡан, алама һүҙ менән һүгеп, ҡыуып сығарған Рамазан күңелендә үҙгәреш башлана, үкенес тыуа, Гөльямалдың үтенесенең асылына төшөнгәндәй була. Герой ауылдаштарының тормошон күҙ алдынан үткәреп, бер генә һау-сәләмәт ғаиләне лә тапмай. Ауылдың киләсәге аяныслы икәнлеген, бөгөнгө иҫерек ауылдаштарҙың, уларҙың ғәрип тоҡомдарының ун—ун биш йылдан йәмғиәт өсөн оло фажиғәгә әйләнәсәген күҙаллай.

Ваҡиғалар үҫешендә икеһе лә Мәрйәм исемле уҡытыусыларҙың Рамазан ҡартҡа делегация вәкилдәре булып килеүе хикәйәләнә. Яҙыусы был күренеште махсус рәүештә рәсмиләштереп һүрәтләй. Рамазандың көтөүсе булыуынан файҙаланып, ҡатындарҙың ҡартҡа яһаған визитын автор нескәрәк, һөйөшөү өсөн тәбиғиерәк күренгән ситуацияла ла күрһәтә алыр ине. Әммә әҙип быға аңлы рәүештә бармай. Уның маҡсаты бөтөнләй икенсе: уҡытыусыларҙың да, ҡарттың да күңелендә ғишыҡ-ғишрәт уйыны түгеллеген, ә дөйөм ил, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыу икәнлеген асып һалыу, дәүләттең киләсәгенә янаған бөгөнгө хафаны, оло фажиғәгә әйләнәсәк күренеште булдырмау өсөн эшхәрәкәт итеүҙәрен үтемле саралар аша, рәсми төҫ биреп күрһәтеү тора. Был мөһим социаль, ижтимағи, хатта сәйәси эш-йөкләмәгә торошло.

Яуаплы эштең башында йөрөүселәр итеп тә әҫәрҙә тик юҡтан ғына уҡытыусылар һайланмаған. Улар — интеллектуаль һәм мәҙәни кимәлдәре буйынса ауылдың иң алдынғы ҡарашлы, киләсәкте ҡайғыртып йәшәүсе шәхестәре. Һөнәрҙәре буйынса ла улар балаларҙың һаны кәмеүен дә, физик һәм аҡылға зәғиф булыуҙарын да көн дә күреп, белеп, һәләкәткә илтеүсе был проблемалар менән туранан-тура осрашып тороусы кешеләр. Шуға ла тап уҡытыусыларҙың повесть геройына сәйер үтенес менән килеүҙәре тәбиғи ҡабул ителә.

“Атай-олатайҙарың нигеҙ һалған ошо ауылдың киләсәге өсөн иң яуаплы кеше һин, ағай, шулай булғас, дәүләт әһәмиәтендәге эш тип ҡара”, тигән үрге һәм түбәнге ос Мәрйәмдәрҙең һүҙҙәре, үҙҙәренең халыҡ, милләт яҙмышын ҡайғыртып, сауаплы эш атҡарасаҡтарын аңлатыуҙары Рамазандың аҙғынлыҡ түгелме һуң был тип, әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләре тип борсолоуҙарын еңә. Бер нисә йылдар дауамында ауыл тоҡомон яҡшыртыу өсөн тир түгә ул. Колхоз эшен һәр ваҡыт намыҫ менән башҡарған кеүек, халыҡты ҡотҡарыу эшенә лә Рамазан ҡарт етди ҡарай: артабан сирле балалар тыуырға, ауыл ҡартайырға тейеш түгел тигән аҡылын алға ҡуйып, фиҙакәр хеҙмәт итә герой. Хәләл ҡатынына ҡарата булған яҡын, йылы хистәрҙе кисермәһә лә, Усман ауылы яҙмышын ҡайғыртыу тойғоһо күңелен йылыта.

Әҫәрҙә Рамазан ҡарт хәтерләүендә кострома үгеҙе хаҡында һөйкәлмә ваҡиға бар. Колхоз һыйырҙарының тоҡомон яҡшыртыу өсөн махсус ҡайтарылған үгеҙҙе ауылдың көсһөҙ, мөсһөҙ үгеҙҙәре дошман күрә. Нәҫел үгеҙенең бағанаға ҡаҙалып, фажиғәле үлеүендә Рамазандың тиҫтере Сабирйәндең ҡатнашлығы булыуына ишара яһала. Рамазан үҙен ошо үгеҙ менән сағыштыра, яҙмыштарында уртаҡлыҡ күрә. Ысынлап та, һуңынан нәҡ ошо Сабирйәндең улы Ринаттың геройҙың яҙмышында һәләкәтле роль уйнауы асыҡлана. Йәғни, һөйкәлмә ваҡиға әҫәрҙәге төп ваҡиғаларға мөнәсәбәтле, көсөргәнешле хәл-әхүәлдәрҙең финалына ишара яһаусы булараҡ ҡулланыла һәм мөһим идея-эстетик функция башҡара.

Ваҡиғалар ҡуйырғандан-ҡуйыра, көсөргәнеш арта бара. Сауаплы эштең дошмандары күбәйә. Ауыл ирҙәренең үс аласаҡтары көтөлә, эскесе Йәүҙәт был хаҡта ҡартты киҫәтеп тә ҡуя. Әммә герой ҡурҡмай, сөнки ул “дәүләт ҡушҡанды үтәй”. Ауыл советы рәйесе, ирҙәрҙе күрә алмаусы яңғыҙаҡ яһил ҡатын да Рамазанды саҡыртып алып ҡаты иҫкәртә.

Сәләмәт балалар тыуыуын яйға һалыу менән етәкселек иткән завуч Мәрйәмде педсоветта тикшерәләр. РОНО мөдиренә ялыу яҙыла, комиссия килә. Хилаф эш ҡылып ятыусы Мәрйәмдәрҙең амораль тәртибен хөкөм итеү йыйылышында күптәр уҡытыусыларҙы яҡлап сыға. Шаулы ваҡиғалар менән район хакимиәте лә ҡыҙыҡһына. Шулай итеп, беҙҙең илдә һәр яҡшы башланғыс кәртәләргә, көслө ҡаршылыҡҡа осраған һымаҡ, һәйбәт уй-ниәттән сығып башҡарылған был эш тә ҡаты ҡаршылыҡҡа осрай.

Көсөргәнешлек арта бара, кульминация яҡынлаша. Яҙыусы был төп ваҡиғалар үҫтерелешенә ҡоролған сюжет һыҙығына йәнәшә экспозицияла уҡ телгә алына килгән ташлыҡ хаҡында, Ташйылға ташын ғалимдарҙың тикшереүе, пробалар алыуы, таштарҙы ҡутарып алып, төҙөлөшкә ташыуҙары тураһындағы ярҙамсы сюжет ебен дә өҙмәй, үҫтерә килә. Артабан ул финалда төп сюжет һыҙығына килеп ялғана.

Кульминацияла Рамазан ҡартты өс-дүрт үсле ир туҡмай. Унан алда ғына герой ғибрәтле төш күрә. Был төш, бер яҡтан, көсөргәнешлектең, ауылдаштар араһындағы мөнәсәбәттәр ҡырҡыулығының һуңғы нөктәһенә етеүен күрһәтһә, икенсе яҡтан, тоҡом яҡшыртыу мәсьәләһен хәл итеү буйынса һайланған алымдың ҡатмарлығын, көтөлмәгән драматик һөҙөмтәләргә, психологик ҡаршылыҡтарға, рухи-әхлаҡи конфликттарға килтереү мөмкинлеген дә төҫмөрләтә.

Туҡмалғандан һуң ҡарттың тәнендә лә, йәнендә лә йәшәү дәрте һүнә. Физик ауыртыныу-һыҙланыуҙарҙан бигерәк, күңелендә йәшәүгә дәрт һүнеүҙән, тормошҡа битарафлыҡтан ул фани донъя менән хушлаша. Ошондай күңелһеҙ һәм шулай булырға тейеш тип көтөлгән тормошсан сиселештән һуң килгән эпилог өлөшө әҫәрҙең идеяһын асыуҙа бик мөһим урын тота.

Мәктәп яңынан һигеҙ йыллыҡҡа, унан урта мәктәпкә әйләнә. Рамазандан тыуған балалар, ҡарттың хәләл балаларына оҡшап, “уҡлау кеүек төҙ кәүҙәле, асыҡ сырайлы, һау-сәләмәт” булып үҫә, яҡшы уҡыйҙар. “Ауылдың дөйөм аңралығы, битарафлығы, сир-сырхау, зәғифлек” фонында — был ҡабарынҡы тасуирлауҙарҙа авторҙың күрәләтә битарафлығы, ситтән тороп, мәрхәмәтһеҙ объектив һүрәтләүе, компромисһыҙ ҡырыҫ баһаһы ярылып ята — әлеге балалар күпкә һәләтле булыуҙары менән айырыла, төрлөһө төрлө ҡалаларҙағы төрлө вуздарға инеп уҡый, диплом ала, үҙен  яҡшы белгес итеп таныта.

Бәләкәй ауылдағы был һәләтле балалар төрлө гипотеза тыуҙыра. Мәғариф министрлығы делегацияһы составында бер нисә тапҡыр Усманға килгән бер йәш кеше Ташйылға буйын “тикшереп”, “асыш” яһай, кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертацияһы яҙа: серле ташлыҡ ниндәйҙер нурҙар тарата, таштарҙы аҡтарып, тейәп ебәрә башлағас, ауыл зарарлы зона уртаһында ҡалған, ошо нур ауырыуы алған ҡатындар талантлы балалар таба тигән “ғилми хеҙмәт” тыуҙыра. Был “асыш” ғилми даирәләрҙә ҙур резонанс уята. Быларҙан тыш, автор сюжетты ауыл араһында таралған имеш-мимеш уйҙырмалар менән дә ҡуйырта, ҡайһы берҙә уларға үҙ баһаһын бөтөнләй белдертмәй, белмәмешкә лә һалыша. Рамазандың ташты баш аҫтына һалып йоҡлауы, шулай итеп был аҙғындың ағыуланыуы, үҙенең хәләл балаларын да, харам балаларын да ағыулауы, уларҙың тәндәренә ағыулы нурҙар һеңеүе һәм башҡалар тураһында шик-хафа кешеләр күңелен солғап алыуы, герой үлгәс тә, конфликттың һаман булһа киҫкен ҡалыуын аңғарта.

Ҡарттың исеме онотола төшә, элекке билдәлелеге шиңә, ул яйлап ҡәҙимге кешегә әйләнә. Был хәл дә нәҡ тормоштағыса, сөнки беҙҙә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күп нәмәнең ҡәҙере юҡ, булһа ла, тиҙ арала уның бәҫен төшөрә һалалар, батҡаҡҡа-бысраҡҡа буяйҙар. Усман ҡартҡа мөнәсәбәттең үҙгәреүе, уның ил, дәүләт, халыҡ өсөн кәрәк тип ихлас тырышып башҡарған эшен һанламауҙары, кәмһетеүле уйҙырмалар таралыуы шуға ла тәбиғи тип ҡабул ителә.

Ошо урында әҫәргә нөктә лә ҡуйырға булыр ине. Әммә тормош дөрөҫлөгөнә тоғро автор бының менән генә сикләнмәй. Иң мөһим әйтер һүҙе — алда.

Эпилогтың артабанғы өлөшөндә яңынан ауылдың элекке хәленә ҡайтыуы тасуирлана: эскелек дауам итә, йәштәр туған-тыумасаһына өйләнә, ҡан яңырмай. Зәғиф, сирләшкә, теге йә был ағзаһы етешмәгән балалар тыуа. Оҙаҡламай Усман ауылы Рамазан ҡарттың нәҫелдең һау-сәләмәт генофондын һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән эшмәкәрлегенә тиклемге хәленә ҡайта. Индивидуаль һыҙатланыш алған ярҙамсы персонаждар Мәрйәмдең, Гөльямалдың артабанғы күңелһеҙ яҙмышы хаҡында ла һүҙ бара. Мәрйәмдең Рамазандан тыуған

һау-сәләмәт улы Мәскәү университетының юридик факультетында уҡый. Ә аҙаҡ үҙ иренән тапҡан улы алтышар бармаҡлы булып тыуа. Иҫерек ире артыҡ бармаҡтарҙы ҡырҡып ташлайым тип, меҫкен баланың ҡул суҡтарын бөтөнләй сабып өҙөп ҡуя.

Урта мәктәп кире һигеҙ йыллыҡҡа, унан башланғысҡа әйләнә. Балалар һаны йылдан-йыл кәмей, булғаны йүнләп уҡый алмай. Халыҡ ҡырыла. Үлем тыуымдан күберәк.

“Даръялай ятҡан ташйылға, ошо ер менән бергә яралған тәбиғи мөғжизә, әлмисаҡтан бирле ҡымшанмаған мәңгелектең үҙе булып кәүҙәләнгән” Усман ташы юҡҡа сыға. Элек мөғжизәүи һауыҡтырыу көсөнә эйә шифалы Усман ташы кешеләрҙең ғүмерен оҙайтһа, хәҙер иһә бер эшҡыуар, таштарҙы файҙаланып, күмеү-ерләү бюроһы асып ебәрә. Һуңғы иң дәү таштарҙың береһен һау-сәләмәт балалар табыу бәхетенә ирешкән ҡатындар рәхмәт йөҙөнән Рамазан ҡәберенә ҡуйҙырта. “Был таш — һуңғы Усман ташы — ауылға нигеҙ ҡорған боронғо нәҫелдең бер вәкиленә, иңдәренә заман үҙе килтереп һалған намыҫ эшен атҡарып һәләк булған уҙаманға һәйкәл” булып күтәрелә. Был киңәйтелгән образлы кинәйәлә ҡасандыр ергә мәңгелеккә тип килгән мәғрүр халыҡтың фажиғәле киләсәгенә тәрән мәғәнәле ымишара йәшеренгән.

Шулай итеп, Әмир Әминев “Усман ташы” повесында ла ғәҙәти булмаған алымға мөрәжәғәт итә. Уйлаһаң, тормошта ҡатындарҙың сит ирҙәрҙән бала табыуы мөмкин хәл һәм был хәлдәр булғылап тора. Йәғни, уйҙырмаға, фантастикаға, тәү ҡарашҡа, нигеҙ юҡ та һымаҡ. Әммә яҙыусы ихтыяры менән тормоштағы ҡәҙимгегә тигәндәй әйләнгән был күренеш махсус рәүештә ҡабартылып, ғишыҡ-ғишрәт төҫө бирмәйсә, ә маҡсатлы йүнәлештә рәсмиләштерелеп, саманан аштырылып — алтмыш йәшлек Усман ҡарт ҡырҡлап баланың атаһы булып китә — һүрәтләнә. Шул рәүешле, реаллек сиктәренән ирреаллеккә сығып, гиперболик алымға мөрәжәғәт итеп, бөгөн бер нәмәгә лә аптырамаусы, “тиреһе ҡалын” уҡыусыны ғәжәпләндереп, уйланырға мәжбүр итеп, яҙыусы мәсьәләнең мөһимлеген, уның әле беҙ баһалап бөтмәгән аянысла эҙемтәләргә килтерәсәген төшөндөрөргә, беҙҙе битараф йоҡонан һиҫкәндереп уятырға тырыша. Милләттең киләсәге тураһында саң ҡаға әҙип ошондай бик үк ғәҙәти булмаған алымға мөрәжәғәт итеп.

Ғөмүмән, “Усман ташы” повесында замандың ҡырҡыу проблемалары әсе ирония, сарказм аша ла һүрәтләнгән, яҙыусының ҡырыҫ та, тәнҡитләүсе, фашлаусы ла, һыҙланыулы, әрнеүле лә мөнәсәбәтбаһаһы аша бик үҙенсәлекле яҡтыртылыш тапҡан.

Дөйөмләштереп әйткәндә, Әмир Әминевтың һәр әҫәрендә көнүҙәк мәсьәләләр, мөһим ижтимағи, социаль, рухи-әхлаҡи проблемалар бар киҫкенлегендә күтәрелә, халыҡ күңеленә барып етерҙәй, вайымһыҙлыҡтан арындырырҙай, милләт киләсәгенә янаусы һәләкәтле күренештәрҙән ҡотолоу юлдарын эҙләүгә этәрерҙәй художестволы алымдарҙа, бик үк ғәҙәти булмаған һүрәтләү картиналарында асыла. Халыҡ шағиры Рәми Ғарипов әйткәнсә, әҙип әйтәһе һүҙен һуңлатмайса, эҫе мәлендә уҡыусыларына еткерә бара. Заманы хаҡында тура ярып ҡыйыу һүҙен әйтеүсе яҙыусы-гражданин әҫәрҙәре аша бөгөнгө йәмғиәт үҫешенә позитив тәьҫир итергә, халҡы яҙмышын хәстәрләргә ынтыла.